# Алдар төлкө

Бер төлкө юл буйлап китеп барғанда, бер һарыҡ тояғы табып алған. Бер утар һымаҡ ергә барып еткәс, Әтәсғолдан йоҡ ларға фатир һораған, ти. Әтәсғол уға:

— Өйөм бик бәләкәй, һин һыйырлыҡ урын юҡ,— тигән, ти.

— Мин үҙем дә бәләкәймен. Үҙем һикелә бөгәрләнеп кенә ятырмын, ҡойроғомдо һике аҫтына тығырмын,— тигән төлкө.

Әтәсғол риза булған. Йоҡларға ятыр алдынан төлкө хужаға:

— Ошо һарыҡ тояғын берәй ергә ҡуйып тор әле! — тигән. Әтәсғол тояҡты һандыҡ артына һалып ҡуйған, ти. Төлкө
уның ҡайҙа ҡуйғанын ҡарап ҡына торған да, хужа йоҡлағас, тороп, тояҡты тышҡа сығарып йәшергән. Иртән торғас, төлкө Әтәсғолдан тояҡты таптыра башлаған. Эй эҙләгән хужа тояҡлы, эй эҙләгән, таба алмаған. Төлкө уға:

— Ярар, тояҡ булмаһа, уның, урынына бер тауыҡ бирерһең! — тигән.

Әтәсғол: «Йә башыма берәй бәләһе булыр», — тип ҡурҡҡан да төлкөгә тауыҡ биреп ҡотолған. Төлкө тауыҡты, юл ыңғайында тояҡты ла алып, сығып киткән.

Икенсе ауылға барып еткәс, ул Ҡаҙғәленән фатир һораған. Ҡаҙғәле ҡаршы килмәгән. Йоҡларға ятыр алдынан төлкө уға:

— Зинһар, ошо тауыҡты йыйып ҡуйсәле! — тигән.

Хужа уны ҡаралды артына йыйып ҡуйған. Төлкө был юлы ла хужаның ҡайҙа ҡуйғанын ҡарап ятҡан. Төндә тороп, тауыҡты икенсе урынға йәшергән. Иртә менән төлкө Ҡаҙғәленән тауыҡты һораған. Хужа ҡараһа, ҡуйған ерендә тауыҡ булмаған. Төлкө:

— Ярар, тауыҡ булмаһа, уның урынына һин бер ҡаҙ бир!— тигән.

Ҡаҙғәле: «Йә берәй бәләһе булыр», — тип, уға ҡаҙ биргән. Төлкө, тояҡты ла, тауыҡты ла, ҡаҙҙы ла алып, үҙ юлына киткән.

Төлкө, йәнә бер ауылға барып етеп, Мөгөҙбайҙап фатир һорап ингән. Мөгөҙбайға ҡаҙҙы иртәнгә тиклем һаҡларға ҡушҡан. Хужа ҡаҙҙы ситәүкә эсенә ултыртып ҡуйған. Төлкө йәнә, төнөн тороп, ҡаҙҙы тышҡа йәшереп ҡуйған. Иртән торғас, Мөгөҙбайҙан ҡаҙҙы таптыра башлаған; теге, күпме генә эҙләп ҡараһа ла, ҡаҙҙы таба алмаған. Шул саҡта төлкө:

— Ярар, улай булһа, ҡаҙ урынына бер үгеҙ бир, бирмәһәң, үҙеңде судҡа бирәм! — тигән.

Мөгоҙбай: «Суд бәләһе — эт бәләһе»,— тип, бер үгеҙен югертеп килтереп биргән.

Төлкө, үҙепең һарыҡ тояғын күтәреп, үгеҙен етәкләп, тауығын, ҡаҙын эйәртеп, өйөнә ҡайтып киткән.

Һыуыҡ төшкәс, уларҙың бөтәһен дә һуйып, бесән аҫтына йәшергән. Ә үгеҙ тиреһенә бесән тултырған да өй алдына баҫтырып ҡуйған.

Бер аҙ ғүмер үткәс, төлкөнөң өйө эргәһенән айыу менән бүре үтеп бара икән. Төлкө уларға:

— Барығыҙ әле, бер сана менән ҡамыт килтерегеҙ. Үгеҙҙе егеп урманға утынға барайыҡ,— тигән.
Айыу менән бүре, югереп барып, сана, ҡамыт килтергәндәр. Төлкө теге үгеҙҙе еккән дә өсәүләп санаға менеп ултырғандар.. Айыу менән бүре үгеҙҙе ҡыуа башлағандар, үгеҙ һис ыжламаған, бер урында тора биргән. Шул ваҡытта төлкө:
— Һеҙ, ебегәндәр, үгеҙҙе лә йөрөтә алмайһығыҙ! — тип, Айыу менән бүрегә асыуланған булып, сананан төшөп киткән.
— Беҙгә шул ғына кәрәк ине, сәнселеп кит! Бына хәҙер үгеҙҙең ҡойроғон күрерһең инде! — тип, бүре үгеҙҙең муйынына барып та йәбешкән, айыу янбашына һелтәп ебәргән. Шул саҡта үгеҙҙең тиреһе бүçелеп, эсендәге бесән әйләнеп килеп сыҡҡан.
Быны ситтән генә ҡарап торған төлкө:
— Бесән булһа ла, иттәй күреп ашағыҙ! — тип хихылдап,. ауыҙын йырып көлә икән.